*ғхмүр АçНАБАЕВ,*
*БДПУ профессоры,*
*башњорт теле кафедраєы мідире*

# ТАҒЫ ЛА «БАШҠОРТ» ЭТНОНИМЫ ТУРАҺЫНДА

«Башҡорт» этнонимының этимологияһы хаҡында күптән бәхәстәр бара, төрлө фекерҙәр, фараздар әйтелә. Төрлө ғилми хеҙмәттәрҙә унға яҡын фараз әйтелде.[1] СССР Фәндәр академияһының тарих бүлексәһе Башҡортостан филиалы нигеҙендә 1969 йылда Өфөлә башҡорттарҙың этногенезына бағышланған махсус фәнни сессия үткәрҙе[2]. Был сессияла сығыш яһаған Р.Ғ.Кузеев менән Ф.Ф. Илембәтовтар «башҡорт» этнонимы эсендә «баш» (главный) һәм «ҡорт» (волк) һүҙҙәрен таба.[3] Шул уҡ гипотезаны үҙ заманында тарихсы-этнограф П.И.Рычков та әйткән булған[4]. Ә мари ғалимы Ф.И.Гордеев «башҡорт» һүҙен «башҡаирт» этнонимына бәйләй, ә һуңғы этнимдың эсендә ул «Башҡа» (гидроним, йәғни Уралдағы бер йылғаның исеме), «ир» (мужчина) һәм *–т* (дөйөм алтай күплек күрһәткесе) өлөштәрен айыра. Тимәк, «башҡаирт» (башҡорт) тип Башҡа йылғаһы буйында йәшәгән кешеләрҙе йөрөткәндәр.[5] Күренекле телсе Ә.Ғ.Бейешев был мәсьәләгә арналған бер мәҡәләһендә «башҡорт» этнонимы эсендә «баш» (главный), «ҡор» (круг, совещание) һәм *-т* (боронғо күплек аффиксы) элементтарын күрә.[6] Был этнонимды *баш корт* (пчела) һүҙе менән дә бәйләүселәр булды һ.б., һ.б.

Үрҙә килтерелгән фараздар бик күп һорауҙар тыуҙыра. Әйтәйек, башҡорттарҙың телендә, хатта уның айырым һөйләштәрендә лә, «ҡорт» һүҙе бүре мәғәнәһен белдермәй һәм шул мәғәнәлә ҡулланылмай ҙа. Халыҡтың исеме составына ингән һүҙ (термин) уның телендә әүҙем ҡулланылырға тейеш ине. Ф.И. Гордеевтың гипотезаһы ла ышандырмай: билдәһеҙ бәләкәй генә йылғаның исеме нисек итеп ҙур халыҡтың исеменә әйләнә алды икән? Ә.Ғ. Бейешевтың фаразы ниндәйҙер ышаныс тыуҙыра һымаҡ, сөнки халыҡтың телендә «ҡор» һүҙе үҙенең мәғәнәһендә бөгөн дә әүҙем ҡулланыла. Әммә ырыу йәки ҡәбилә вәкилдәренең ҡоро (кәңәшмәһе) халыҡтың исеменә әйләнеүе шик тыуҙыра: төп йәки баш ҡорға йыйылғанға тиклем уларҙың исеме булманымы икән?

Һәм иң аҙаҡтан профессор Ж.Ғ.Кейекбаевтың был этнонимға ҡарата әйтелгән һәм онотолған бер гипотезаһына туҡталайыҡ. «Совет Башҡортостаны» гәзитендә 1965 йылдың 17 июнендә баҫылып сыҡҡан мәҡәләһендә (Венгрияға сәйәхәте тураһында) профессор «башҡорт» этнонимын «бәш уғыр» ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән тип раҫлай. Унынса, *бәш* — боронғо

төрки һүҙе, ул беҙҙең телдә биш һанын белдерә, ә *угыр* ҡәбилә исеме булып сыға. Алда әйтелеүенсә, 1969 йылда Өфөлә башҡорт этногенезына бағышланған махсус фәнни сессия үткәрелә, унда күп кенә сығыштар була, әммә Ж.F. Кейекбаевтың гипотезаһы иҫкә алынмай. Гипотеза гәзит мәҡәләһе эсендә юл ыңғайында ғына әйтелгәнгәме (мәҡәләнең төп маҡсаты Венгрияға сәйәхәтте тасуирлау булған бит), әллә был гипотеза бөтөнләй ышанмаҫлыҡ булып күрендеме — әйтеүе ҡыйын. Минең уйымса, был ғәжәп хәлдең төп сәбәбе шунда: үҙенең мәҡәләһендә профессор Ж.F.Кейекбаев «башҡорт» һүҙенең этимологияһы тураһында гипотеза ғына әйтте, ә үҙенең фаразын, уның ысынбарлыҡҡа тап килеүен иҫбат итмәне. Гәзит мәҡәләһендә бөтөнләй яңы, беренсе башлап әйтелгән гипотезаны иҫбат итеү мөмкинлеге лә булмағандыр...

Ә был гипотеза бик күп һорауҙар тыуҙыра: ниңә *угыр* һүҙе алдынан *бәш* (биш) һаны килгән? Ни өсөн боронғо төрки телендәге *бәш* һүҙе хәҙерге биш һанын биргән, ә «башҡорт» һүҙендә *баш* формаһына әйләнгән, көтөлгән «бишҡорт» һүҙе барлыҡҡа килмәгән? Был терминдың аҙағынан килеп ҡушылған (өҫтәлгән) –*т* ялғауы ниндәй ялғау ул һәм ул ниңә килеп өҫтәлгән? Әлбиттә, мәрхүм профессор был һорауҙарға яуабын башында йөрөткәндер, әммә бик иртә һәм кинәт үлеүе арҡаһында был һорауҙар бөгөнгә тиклем яуапһыҙ ҡалды. Әлбиттә, махсус фәнни сессияға әҙерләнгән ғалимдарыбыҙ Ж.F. Кейекбаевтың гипотезаһы менән таныш булғандарҙыр (уларҙың һис юғында берәйһе гәзит уҡып баралыр бит!), тик гипотезаның бөтөнләй яңы булыуы һәм уның дөрөҫлөгөн иҫбатлаған бер генә аргументтың да килтерелмәүе уға ҡарата етди ышанысты уятмаған, күрәһең. Әгәр ошо сессияға тиклем профессорыбыҙ йәшәһә, унда был этнонимдың этимологияһы буйынса ул һис шикһеҙ сығыш яһар һәм тейешле аргументтарын килтерер ине...

Профессор Ж.F.Кейекбаев башҡорт теленең тарихи фонетикаһын, шунан һуң бөтә Урал-алтай телдәренең тарихи морфологияһын өйрәнде һәм шул нигеҙҙә урал (фин-угыр һәм самодий телдәре) һәм алтай (төрки, монгол һәм тунгус-манчжур) телдәренең ҡәрҙәшлеген иҫбат итте, үҙенең «Введение в урало-алтайское языкознание», «Основы исторической грамматики урало-алтайских языков» исемле капитал хеҙмәттәрен яҙып ҡалдырҙы.

Уның аспиранты булараҡ, мин үҙем дә тарихи грамматика мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһындым, доцент В.Ш. Псәнчин менән бергәләп ике китап яҙып баҫтырҙыҡ, мәҡәләләр ҙә яҙғыланым (мөмкинлек булғанда инде, ә мөмкинлектәр миңә күп эләкмәне). Бөгөн дә студенттарға тарихи грамматика буйынса лекциялар уҡыйым, курс, диплом эштәренә етәкселек итәм. Әлбиттә, йыш ҡына «башҡорт» этнонимы хаҡында бәхәстәр тыуа, шуларҙы күҙәтә барҙым. Был этноним тураһындағы ҡараштарҙы ныҡлап өйрәнгәс, уларҙы бер-береһе менән сағыштырғас, Ж.F. Кейекбаевтың гипотезаһының дөрөҫлөгөнә, профессорҙың гениаллегенә тағы ла бер ҡат инандым.

Был мәҡәләмдә профессорым әйтеп ҡалдырған гипотезаның дөрөҫлөгөн иҫбат итеп ҡарарға батырсылыҡ иттем.

Ә.F. Бейешев «башҡорт» этнонимының ҡушма һүҙ икәнен бик ышандырырлыҡ иҫбат иткән.[7] Ысынлап та, башҡорт теленең тамыр һүҙҙәрендә беренсе ижектә *а* өнө килһә, икенсеһендә бер ваҡытта ла *о* өнө килмәй. Ж.F.Кейекбаев, һуҙынҡы өндәрҙең тарихын тикшереп, шундай һығымтаға килгән: «...башҡорт телендә икенсе һәм өсөнсө ижектәрҙең һуҙынҡылары беренсе ижектәге һуҙынҡыларға буйһоноп килəләр..., ижектәрҙәге һуҙынҡыларҙың теҙелешендә ны-

тыштан бер закончалык бар: беренсе ижектә а өн булһа, икенсе, өсөнсө ижектәрҙә лә өн килә: ағтан, ватын, байты, артык...»⁸. Тимәк, *башҡорт* һүҙе ҡушма һүҙ булып, *баш* һәм *ҡорт* һүҙҙәренән барлыҡҡа килгән. Тамыр һүҙ булһа, ул *баш-ҡорт* рәүешендә әйтелер ине. Әммә Э.Г.Бейешев *баш* һүҙенең *биш* (пять) һүҙе менән уртаҡлығын танымай: «борнғо төрки телендә е, шулай уҡ ә өндәре бер ниндәй шартта ла *а* өнөн бирә алмай», тип һығымта яһай таһим.⁹ Һығымтап та, Ж.Г.Кейекбаев, күренекле төрколог С.Е.Маловтың транскрипцияһына таянып, борнғо төрки телдәрендә ә өнөнөң булыуын күрһәтә.¹⁰ Был ин хәҙерге төрки телдәрендә, шул иҫәптән башҡорт телендә лә, бер осраҡта *э*-өнөнә, икенсе осраҡта и өнөнә күскән: борнғо төрки телендә *әкі, әмгәк, әр, әш, бән, бәс*¹¹ (С.Е. Маловтың транскрипцияһы) башҡорт телендә *ике, эмгәк, ир, иш, мин, биш* һүҙҙәрен биргән. Яҙма ҡомартҡыларҙа биш һанының төрлө варианттары осрай: *бәс, бәш, біш, біс*. Шуғалар ҙа был һан төрки телдәрендә бер төрлө генә вариантта осрамай: төрөкмән, уйғыр телдәрендә *бәш*, шор телендә *пеш*, ногайҙа *беш*, бараба татарҙары телендә *пиш*, һ.б. (ошо телдәрҙең орфографияһында яҙылғанса). Борнғо *ә* өнөнөң яҙмышы ниндәй ҡарағаш телдәрҙә лә бер төрлө булмаған: башҡортса *тарыҡ, ҡарыҡ*, татарса *тирәк*, *ҡыҙыҡ* һ.б. Тимәк, башҡорт теленең борнғо бер саҡында борнғо *бәш* (*бәс*) һүҙе *баш* һүҙен биргән булырға тейеш, э *баш* һүҙе, *ҡорт* һүҙе айырым, ҡушма һүҙ эсенә ингәс, икенсе һүҙең йоғонтоһонда *баш* һүҙенә әйләнеүе мөмкин, сөнки башҡорт телендә борон-борондан сингармонизм законы хәрәкәт иткән. Был закон буйынса бер һүҙ эсендә төрлө рәт һуҙынҡылары (бағ... һәм нәҙек һуҙынҡылар) килә алмай. Шулай итеп, *башҡорт* һүҙе оҙаҡ йәшәй алмаған: икенсе ижектәге ҡалын баҫымлы ҡалын һуҙынҡы он *ҡулланыуы* (*баҫымлы*) ҡалын а

һуҙынҡыһының йоғонто яһап, уны ҡалын һуҙынҡыға (а өнөнә) әйләндергән. Бындай үҙгәрештәрҙе беҙ борнғо телебеҙҙә лә күрәбеҙ: *әләсәй, ҡартнай, иртәнсәк, ҡайынбикә* йәки *ҡайынса* тип һөйләйбеҙ (э был һүҙҙәрҙең тамыры башҡаса булған: *әлә әсәй, ҡарт инәй, иртән сәк, ҡайын биә*).

Тимәк, «башҡорт» этнонимының беренсе һүҙе биш һаны менән бәйләнгән. Р.Г. Кузеев та «башҡорт» этнонимы сығышындағы *баш* һүҙенең *биш* һанынан килеп сығыуын кире ҡаҡмай һәм «башҡорт» этнонимының «биш ҡәбилә» йәки «биш ырыу» мәғәнәләрен белдереү мөмкинлеген таный, шуға уҡ башҡорт этногенезының башында биш ҡәбиләнең тороуы хаҡындағы легендаларҙың таралыуын да әйтеп китә.¹²

Һығымтап та, борнғо яҙма ҡомартҡыларҙа ҡәбилә йәки ырыуҙарҙың исеме һандың төрлө һандар ҡулланылған булған. Бер нисә миҫал: Тоҡуз оғуз мәнің будунум әрті [Токуз-огузы были мой собственный народ]. Уч оғуз сүсі басса кәлті... [Войско уч-огузов пришло, чтобы нас поразить...]. Тоҡуз оғуз будун јәрін субін ыдып табғачғару барды [Народ токуз-огузов покинул страну свою (землю, воду) и предался табгачам].¹³ (С.Е.Маловтың транскрипцияһы һәм тәржемәһе). Уч ҡарлуҡ йабаҗ сакынып тезе барды... [Народ (три карлука) замыслив бежал...]¹⁴ (Г. Айдаровтың транскрипцияһы һәм тәржемәһе).

Угуз һәм ҡарлуҡ ҡәбиләләренең булыуы тарихта билдәле. Проф. Ж.Г. Кейекбаевтың раҫлауынса, «...әҙербайжан, төрөкмән, төрөк, гагауз, ҡырым-татар телдәре борнғо угуз-сәлжүк ҡәбиләләре теленән бүленеп киткән ҡәүемдәр..., уйғур, үзбәк һәм борнғо сығтай телдәре ..., борнғо ҡарлуҡ ҡәбиләләре теленән үҫкәндәр».¹⁵ Күренекле төрколог Н.А. Баскаков, төрки телдәрен генетик һәм типологик яҡтан төркөмләгәндә, угуз-төрөкмән төркөмсәһенә угуз, уч-угуз, туҡыз-угуз ха-

ләгтарының телдәрен индерә (он-оғуҙов, токуз-огуҙов терминдарын ҡулланған).[18] Тимәк, төрлө ҡәбиләләрҙең, һуңынанырак халыҡтарҙың исемдәре атамаһын һандарҙың килеүен тел ғалимдар ҙа таныйҙар. Шулай булғас, «башҡорт» этнонимының беренсе өлөшө (баш) боронғо төрки телендәге баш, йәғни баш һанының килеп сығыуы бик тәбиғи һәм уҡыусыға ла аңлашылалыр.

Был этнонимдың һуңғы элементын (-т) Ж.Г. Кейекбаев монгол телдәренең күплек аффиксы тип һанай.[19] Был фекергә беҙ ҙә ҡушылабыҙ. Әммә был күплек күрһәткесе (-т) боронғо төрки телендә лә шул функцияла ҡулланылған булған. В.А.Котвичтың раҫлауынса, «иң боронғо яҙма ҡомартҡылары — Орхон яҙмаларын тикшереү хәҙерге берҙән-бер күплек ялғауы булған -лар аффиксының һирәгерәк ҡулланылыуын күрһәтә: уның менән бер ҡатарҙан -т, -з, -ан/ән, -гун/гүн аффикстары ла файҙаланылған булған».[20] Уны ла түгел, М.Ҡашғари XI быуатта яҙылған һүҙлегендә «күплек формаһының -ан/ән, -т аффикстары менән яһалыуы күрһәтелә» тип раҫлай: *тәгин* (шаһзадә) — *тәгит* (шаһзадәләр).[21] Тимәк, төрки телдәрендә урта быуаттарҙың башында ла -т күрһәткесе күплек аффиксы булып хеҙмәт иткән. Ә фин-угор телдәрендә -т күрһәткесе бөгөн дә күплек аффиксы булып йөрөй; мәҫәлән, фин телендә: *lintu* — *lintut* (ҡош-ҡоштар), *kirja* (китап) — *kirjat* (китаптар).[22] Шулай итеп, боронғо -т (-д) күрһәткесе монгол телдәрендә генә түгел, төрки һәм фин-угор телдәрендә лә күплек аффиксы булып хеҙмәт иткән, тик монгол һәм фин-угор телдәрендә был күрһәткес бөгөн дә үҙенең күплек мәғәнәһен һәм функцияһын юғалтмаған, һаҡлаған. Ә төрки телдәрендә боронғо ябай күплек күрһәткестәре (-т, -з, -ң) үҙҙәренең күплек мәғәнәһен һәм функцияһын да юғалтҡандар, һүҙҙең тамырына ҡушылып киткәндәр, сөнки был телдәрҙә плеонизм тигән күренеш көслө хәрәкәт иткән. Уның асылы: теге йәки был боронғо ябай аффикс үҙенең мәғәнәһен юя, юғалта бара, һүҙҙең тамырына ҡушылып китә. Төрки тел белемендә плеонизм күренешенең хәрәкәт итеүен тәүбашлап профессор Ж.Г.Кейекбаев күрһәтте: «...эвенк һәм эвен телдәренән айырмалы рәүештә, төрки телдәрендә күплек һанының беренсе аффиксы -л (ул яҡындар һүҙендә шуға бөткән исемдәргә ҡушылған булған) аҙлап-аҙлап үҙенең күплек мәғәнәһен юғалтҡан. Шуға күрә -л аффиксы нигеҙгә дөйөм ҡалып (модель) буйынса билдәһеҙлек күрһәткесе -а/-ә килеп ҡушылған. Шуның һөҙөмтәһендә -ла/-лә күплек аффиксы барлыҡҡа килгән. Ул үҙенең күплек мәғәнәһен ҡарасай-балҡар телендәге исемдәрҙә һәм ҡырғыҙ телендәге ҡылым формаларында һаҡлаған, мәҫәлән, ҡарасай-балҡар: *къонакъ-ла* «гости», *арба-ла* «телеги, арбы», *сабы-ла* «дети»; ҡырғыҙ: *жазды-ла* (*жазды-л-а* формаһынан) «пишите (вы все)», *иштегиле* «сделайте (вы все)». Башҡа төрки телдәрендә -ла/-лә аффиксына боронғо күплек күрһәткесе -р килеп өҫтәлгән; ул тунгус телдәрендә н авазы менән бөткән исемдәргә ҡушыла, мәҫәлән, эвенк, эвен. Орон «олень» һәм орор «олени».[23] Ж.Г.Кейекбаевтан һуң теге йәки был боронғо ябай аффикстың мәғәнәһе шымыуын күрһәткән төрколог профессор Баскаков та таныны һәм был күренеште плеонизм тигән термин менән атаны: «Плеонизм возникает на основе полного стирания первоначального грамматического значения устаревшего аффикса и вытекающего отсюда переразложения основы».[24]

Төрки телдәренән айырмалы рәүештә, фин-угор, тунгус-маньчжур, монгол телдәрендә плеонизм күренеше йомшаҡ хәрәкәт иткән йә бөтөнләй үҙен һиҙҙермәгән.

Шулай итеп, «башҡорт» этнонимының аҙағында килгән -т күрһәткесе — боронғо дөйөм урал-ал-

тый күплек аффиксы, тик ул, үҙенең күплек мәғәнәһен юғалтып, һүҙҙең тамырына ҡушылып үҫкән. Ҡайһылар был аффикс этноним составында даими ҡулланылмаған, тик ҡәбиләләрҙең күплеген күрһәтергә теләгәндә генә килеп ҡушылған. Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев үҙенең бер этнографик хеҙмәтендә былай тип күрһәтә: «әҙәби башҡорттар... үҙҙәрен баш уңғар, йәғни баш югур һәм, әҙәп килеп, башуур, һуңғарак башҡуурт тип йөрөтә башлағандар».[25] XIX быуатта йәшәгән һәм ижад иткән дүр ғалимға, мәғрифәтсегә, тарихсыға ышанырға булалыр. Тимәк, ҡайһылыр башҡорттар үҙҙәрен башҡур тип йөрөткәндәр. Шул шылттарҙа урыҫтар уларҙы башкиры тип атағандар ҙа инде, был этнонимдың аҙағында -т аффиксы булһа, уларҙы башкирты (йәки башкирцы) тиерҙәр ине.

Хәҙер этнонимдың ҡор өлөшөн асыҡлайыҡ. Уның ҡорт (бөрө йәки ҡорт «пчела») һүҙенән килеп сығыуына ышанырға тура килә, сөнки -т аффиксы аҙағырак килеп ҡушылған. М. Өмөтбаевтың тарихи-этнографик хеҙмәттәре этнонимдың ҡор өлөшөн асыҡлау өсөн дә ярҙам итә: «Русҡар башҡорттарҙы югорҙар (югурҙар) тип йөрөткәндәр. Абулғази тарихында... угыр тиелә. Ө башҡорттар үҙҙәрен уңғар тип атағандар. Улар борондан уҡ Урал тәҙмәләренең ике яғында йәшәгәндәр».[26]

Тимәк, М. Өмөтбаев нәҡ ваҡи «башғур» атамаһы «баш угыр» ҡушылмаһының барлыҡҡа килгән булырға тейеш: һүҙбәйләнеп ҡушма һүҙгә әйләнһә, басымһыҙ ҡалған у өнөнөң тулы редукцияға бирелеүе тәбиғи хәл. Был хәлде бөгөн дә күреп була: ҡара ҡаҙаҡ — Ҡараҡаҙаҡ, алма ағасы — алмағас, ҡара Йылға — Ҡараҙыл һ.б. Ә борондо бәш (баш) һаманың баш һүҙенә әйләнеү сәбәбен алдағы биттәрҙә асыҡларға тырышҡайныҡ.

Шулай итеп, «башҡорт» этнонимының нигеҙендә уғыр(угор) ҡәбиләләренең исеме ята.

Был тәбиғиҙер, сөнки Көньяҡ Уралда бик борондан замандарҙа угыр ҡәбиләләре йәшәгән. Күренекле археолог, тарих фәндәре докторы профессор Н.А. Мәжитов былай тип яҙа: «Население Южного Урала в эпоху бронзы было разнокультурным и в языковом отношении подразделялось на две основные группы: индо-иранскую (срубные племена) и финно-угорскую, которая, в свою очередь, распадалась на две ветви: финно-пермскую (прикамские племена) и угорскую (зауральские племена)».[27] Тимәк, башҡорт халҡының барлыҡҡа килеүендә угыр ҡәбиләләренең ҡатнашыуы бик мөмкин. Һуңынан был ҡәбиләләр төрки телле ҡәбиләләр менән ҡушылып, төрки телле башҡорт халҡы барлыҡҡа килгән дә инде. Шуның менән дә, бөгөнгө башҡорттарҙың йөҙ, сәс, күҙҙәренең төрлө төҫтә булыуы (Шаран районында һары сәсле башҡорттар бик күп осрай) менән ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, якут, тува, хакас халыҡтарынан, йәғни саф төрки сығышлы халыҡтарҙан айырыла бит. Этнос составында ҡатнашҡан төрки телле ҡәбиләләр күп тә, көслө лә булған, шулай булмаһа, төрки телле башҡорттар өсөн берәй-бер тел булып китмәҫ ине. Н.А. Мәжитовтың раҫлауынса, «...роль ранних тюркских кочевников Южного Урала в формировании древнебашкирского этноса несомненна».[28]

Шулай итеп, «башҡорт» этнонимы составында түбәндәге өлөштәрҙе күрәбеҙ: *баш+угыр//уғур+т*; *баш+уңғар+т* (-т боронғо ватай күплек күрһәткесе).

Һуңғы гипотезаның дөрөҫлөгөн, ышанырлыҡ тип килгән «венгр» һәм «болғар» этнонимдарының да этимологияһы раҫлай: «венгр» этнонимы һәм шулай уҡ *он уғыр//уңғыр* ҡушылмаларынан барлыҡҡа килгән; ошондай төрлө *он* һүҙе *ун* һанын белдерә. Тимәк, *он уғыр//уңғыр* ҡушылмаһы бер һүҙгә әйләнеп, *венгр* һүҙен барлыҡҡа килтергән дә инде. М. Өмөтбаевтың күрһәтеүенсә, башҡорт

ҡәбиләләре лә ниндәйҙер ваҡыт эсендә үҙҙәрен «унгар» йә «биш унгар» тип йөрөткәндәр. Тимәк, башҡорт һәм венгр ҡәбиләләре бер тирәлә күрше булып йәшәгәнлектән (венгрҙарҙың ҡасандыр Көньяҡ Уралда йәшәүҙәре тарих фәнендә танылған) ниндәйҙер ваҡыт эсендә үҙҙәрен бер исем — уңғар исеме менән йөрөткәндәрҙер, ә был исемдең «ун угыр» ҡушылмаһынан барлыҡҡа килеүе шик тыуҙырмайҙыр. Һуңынан күпмелер ваҡыттан венгрҙар күсеп киткәс, башҡорттар үҙҙәрен биш уңғар йәки биш уңғар тип атауҙары мөмкин, сөнки был ваҡыттарҙа уңғар атамаһы бер һүҙ булып аңлашылып, уның эсендәге ун һүҙенең һәм мәғәнәһе юйыла башлаған. Тимәк, Ҡырмыҫҡалы районындағы Бишүләр ауылының атамаһы башҡорт һәм венгр ҡәбиләләренең бергә арҡаһында йәшәүенән тороп ҡалған бер тарихи иҫтәлек ул. Шулай итеп, венгр һәм уңғар терминдары бер үк һүҙҙәрҙән барлыҡҡа килгән: ун — башҡорт һүҙе, вун — сыуаш теленең һүҙе, барыбер «ун» тигәнде аңлата.

«Болгар» этнонимы составында ла уғыр (угор, угор) ҡәбиләһенең исеме күренә. [illegible] буйынса түбәндәгеләрҙе әйтергә була: алтай йәки төрки телдәренең бик боронғо осорында бил рәүешендә [illegible] һан булып, ул «биш» мәғәнәһен белдергән булырға тейеш, сөнки, беренсенән, V-VIII быуаттарҙа яҙылған комментарийҙарҙа биш һаны булған; икенсенән, хәҙерге сыуаш телендә пиллек//пилек һаны «биш» мәғәнәһен белдерә. Был тәбиғи, сөнки башҡа төрки телдәрендә ҡулланылған ш өсө урынына ла сыуаш телендә йыш ҡына л килә: башҡортса [illegible], сыуашса [illegible]. Тип был телдең бөгөнгө торошонда пил рәүешендә әйткәнде һәм юҡ, ә башҡа һандарҙың тулы һәм ҡыҫҡа варианттары бөгөн дә әүҙем ҡулланыла: икеле/ики/ик [10]; алла/ала/ал [50] һ.б. Тимәк, ни сәбәптәндер пиллек/пилек һанының пил варианты ҡулланыуҙан төшөп ҡалған. Әммә ул борон төрки телендә (V-VIII быуаттарҙан элегерәк) һис шикһеҙ булған, сөнки биш һаны булғас, был варианты ла булырға тейеш. Ул сыуаш телендә биш һанының тулы вариантын яһауҙа ҡатнашҡан; икенсенән, «болгар» этнонимының тәүге өлөшөн тәшкил иткән: бил угор (угыр, угор) — болгар. Юҡҡа ғына Н.А. Баскаков сыуаш телен болгар телдәре төркөмөнә индермәгән икән.[17]

Һығымталап әйткәндә, «башҡорт», «болгар», «венгр» этнонимдарының составында биш йәки ун һандарын белдергән һүҙҙәр һәм боронғо угыр (угор, угар) ҡәбиләһенең исеме-атамаһы бар; «башҡорт» этнонимы, боронғо ҡушлыҡ күренеүенсә (-м) ҡабул итеп, бер аҙ ҡатмарланған; йәғни был этнонимдар бер үк ысул (модель, ҡалып) менән яһалған.

Шулай итеп, «башҡорт» этнонимының этимологияһына ҡағылған гипотезаларҙы анализ яһағас, профессор Ж.Г. Киекбаевтың эшләп сыҡҡан гипотезаһының дөрөҫлөгөнә, ысынбарлыҡҡа тап килеүенә хәҙер уҡыусы ышаныр, тип уйлайбыҙ. Һәр хәлдә, ышандырырлыҡ дәлилдәр килтерергә тырыштыҡ. Үкенескә ҡаршы, профессор үҙ гипотезаһының дөрөҫлөгөн иҫбат итеп өлгөрмәне, шуға күрә лә ғалимдар уға иғтибар итмәне. Әйткәндәй, хатта ошо этнонимға бағышланған фәнни семинарҙа ла был гипотезаның иҫкә алыныуы булманы. Э ниндәй гениаль гипотеза булған!

## ҺЫЛТАНМАЛАР:


1. Т.М. Гарипов, Р.Г. Кузеев. Башкирские родоплеменные названия и их алтайские параллели//Проблема общности алтайских языков. Л., 1971, 219-сы бит.
2. «Научная сессия по этногенезу башкир». Материалы сессии. Уфа, 1969.
3. Шул уҡ йыйынтыҡ. 104-се һәм 124-се биттәр.
4. П.И. Рычков. Топография Оренбургской губернии. Уфа, 1999, 50-се бит.
5. Ф.И. Гордеев. О происхождении этнонима башкир//Научная сессия по этногенезу башкир. Материалы сессии. Уфа, 1969, 163-164-се биттәр.
6. А.Г. Биишев. Еще раз об этнониме башҡорт//Проблема общности алтайских языков. Л., 1971, 221-222-се биттәр.
7. Шул уҡ хеҙмәт. 221-се бит.
8. Ж.Ғ. Кейекбаев. Башҡорт теленең фонетикаһы. Өфө, 1958, 69-70-се биттәр.
9. А.Г. Биишев. Күрһәтелгән хеҙмәт. 221-се бит.
10. Ж.Ғ. Кейекбаев. Күрһәтелгән хеҙмәт. 63-сө бит.
11. С.Е. Малов. Памятники древнетюркской письменности Монголии и Киргизии. М., 1959, 61-92-се биттәр.
12. Р.Г. Кузеев. Этническая культура башкир с конца I тысячелетия н.э. до XIX века.//Научная сессия по этногенезу башкир. Уфа, 1969, 104-се бит.
13. С.Е. Малов. Күрһәтелгән хеҙмәт. 17-22-се биттәр.
14. Г. Айдаров. Язык Орхонских памятников древнетюркской письменности VIII века. Алма-Ата, 1971, 344-се бит.
15. Ж.Ғ. Кейекбаев. Күрһәтелгән хеҙмәт. 9-сы бит.
16. Н.А. Баскаков. Тюркские языки (Общие сведения и типологическая характеристика)//Языки народов СССР. М., 1966, 15-се бит.
17. А.Г. Биишев. Күрһәтелгән хеҙмәт. 221-222-се биттәр.
18. В.Л. Котвич. Исследование по алтайским языкам. М., 1962, 326-сы бит.
19. Девону Луғат турк. Ташкент, 1951, 482-се бит.
20. Дж.Ғ.Кейекбаев. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков. Уфа, 1996, 153-154-се биттәр.
21. Ж. Ғ. Кейекбаев. Күрһәтелгән хеҙмәт. 171-се бит.
22. Г.Ф. Благова. Плеонастическое использование аффиксов в тюркских языках в историческом освещении.//Вопросы языкознания. 1968, 482-се бит.
23. М. Өмөтбаев. Йәдкәр. Өфө, 1984, 196-сы бит
24. М. Өмөтбаев. Күрһәтелгән хеҙмәт. 195-се бит.
25. Н.А. Мажитов. Происхождение башкир (историко-археологический анализ)//Научная сессия по этногенезу башкир. Уфа, 1969, 19-сы бит;
26. Н.А. Мажитов. Күрһәтелгән хеҙмәт. 21-се бит.
27. Н.А. Баскаков. Күрһәтелгән хеҙмәт. 15-се бит.